«Ватан юлдары буйлап – 2017 йыл» исемле тыуған яҡты өйрәнеүсе уҡыусыларҙың тикшеренеү эше муниципаль конкурсы

“Әҙәби тыуған яҡты өйрәнеү” номинацияһы

# «Фәрит Билаловтың ижады - тыуған яҡтың әҙәби мираҫы»


Әҙерләне: **Билалова Азалия,**
Башҡортостан Республикаһының
Учалы районы Мәсҡәү урта мәктәбенең
5 класс уҡыусыһы
Бәйләнеш телефоны: (34791) 43-6-46

Етәксеһе: **Мәүлитова Зилдә Әхмәҙиә ҡыҙы,**
Башҡортостан Республикаһының
Учалы районы Мәсҡәү урта мәктәбенең
“Бөтә белергә теләйем” исемле
мәктәп түңәрәге етәксеһе
Бәйләнеш телефоны: (34791) 43-7-80
e-mail: mavletova1967@mail.ru




Мәсҡәү ауылы
2017 йыл

**Тикшеренеү эшемдең бурыстары**:

Олатайымдың ижадында тыуған яҡтың әҙәби мираҫын өйрәнеү һәм әҙәби ижадҡа һөйөү уятыу.

Тикшеренеү эше буйынса тәжрибә туплау; анализдар эшләп, һығымта яһарға өйрәнеү;

**Я6майынса нисек т162йем?**

**К1пт2н инде, ши4ыр я64ан булып,**

**Т21б2 итеп кире ташланым.**

**Т080лг2с т2 (шулай була ик2н!)**

**Ши4ыр мен2н яна башланым.**

**Л2кин й0р2к3е16е8 с2б2бен мин**

**?ояш активлы7тан к1рм2йем.**

**Тыу4ан ерем г1з2л мо84а тулы-**

**Я6майынса нисек т162йем?!**



**Тикшеренеү эшенең объекты** булып олатайымдың Тыуған яғы һәм унын хозурлығы тураһында яҙған шиғырҙары тора.

**Тикшеренеү эшемдең актуаллеге**: Олатайым үҙенең ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә тыуған яҡ тәбиғәтенең нескәлектәрен, һәр бер сәскә – ағастарҙың матурлығын, ҡоштарҙың тормошон, хатта күктәге йондоҙҙарҙың хәлен шиғырҙарында яҙып ҡалдырған. Мин унын ижадын өйрәнәсәкмен, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараште буласаҡмын, башҡаларға ла һәр тыуған таңға ҡыуанып йәшәргә өйрәтәсәкмен. Был минең **тикшеренеү эшемдең гипотезаһы.**

# I бүлек. **Фәрит Билаловтың тыуған яғы**



Олатайым, Фәрит Шамил улы Билалов, 1938 йылдың 5 июнь көнө Учалы районы Мәсҡәү ауылында тыуған. Олатайымдың атаһы ла ошо Мәсҡәү ауылыныҡы, ул һуғышҡа киткәнсе колхоз исәпсеһе булып эшләй. Ҡәһәрле һуғыштан Шамил олатай ҡайтмай, ғаиләһен ҡабат күрергә яҙмай. Әсәһе, абруйлы уҡытыусы Мәрхәбә Вәлит ҡыҙы, балаларҙы етем итмәй, пенсияға сыҡҡансы, тырышып мәктәптә эшләй.

Атай назынан иртә ҡалған Фәрит Шамил улы әсәһен йәлләп төрлө эштәрҙә йөрөй. Бала сағы уйын менән түгел, эш менән үтә. Әсәһе уны ғаилә башлығындай күреп, барлыҡ эштәргә, төрлө һөнәрҙәргә өйрәтеп, ысын ир-ат итеп үҫтерә. Олатайым, артабан уҡый алмағанлыҡтан, 7 класс белем менән ҡала һәм төрлө эштәрҙә йөрөй. Малсылар курсын тамамлағас, колхозда һауын гурты бригадиры булып, тимерлектә, иҫәпсе, келәт мөдире кеүек эштәрҙә эшләй. Бик иртә, 16 йәшенән эш башлай олатайым.





Ул колхоз эшендә тәбиғәткә һоҡланып, рәхәтләнеп эшләй. Эшкә барған һәм ҡайтҡан һайын күңеле менән шиғырҙар яҙа. Тыуған яҡ тәбиғәтен шул тиклем ярата. Ауылдың эргәһенән генә, Азия һәм Европа сиктәрен айырып, Яйыҡ йылғаһы аға, йылға аръяғында емеш-еләкле һаҙ башлана. Икенсе яғын тарихҡа бай тауҙар уратып алған, тауҙарында емеш-еләк, төрлө хайуан-ҡоштар күп. Ауылдың осонда бесән сабырлыҡ туғайлыҡтар йәйрәп ята, тәмле икмәк үҫкән баҫыуҙар ҙа бар. Шундай матур һәм бай ерҙе һайлаған Мәҫкәү ауылы.

Олатайым Яйыҡ йылғаһында туя алмай һыу төшә, балыҡ ҡармаҡлай. Һаҙына кереп муйыл ашай, ағастарҙа һайраған ҡоштар тауышын иркенләп тыңлай. Туғайында бесән саба, ҡымыҙлыҡ, балтырған, йыуа ашай, ҡосаҡ-ҡосаҡ сәскәләр өҙә. Олатайым һәр матурлыҡты күргән һайын яҙған шиғырҙарын күңел дәфтәренә йыя бара.



# II бүлек. **Фәрит Шамил улының ғаиләһе**

1966 йылда күҙ һалып йөрөгән күрше ауылы ҡыҙы – Мостафина Рүзилә Ғүмәр ҡыҙына өйләнә. Өйләнгәс тә, йәш белгесте, Белорет ҡалаһына, аҙаҡ “Ҡарағай” совхозына эшкә саҡырып алалар. Ун йыл ситтә йөрөгәс, ғаиләһе менән ауылына ҡайта. Сөнки, олатайымдың Камил ҡустыһы оҙаҡ ауырығандан һуң үлә, әсәһенә яңғыҙ ауыр була.



Олатайым ауылға ҡайтҡас, ауыл тағы ла йәнләнеп ҡалғандай була. Өләсәйем, Мәрхәбә Вәлит ҡыҙына ла йәшәүе еңелләшә. Улы һәм килене ҡулында ул тағы бәхетле ғүмер кисерә.



Ошо йылдарҙа Мәрхәбә өләсәйҙе ҡыуандырып өс бала эргәһенә тағы ла бер-бер артлы ике улы тыуа. Олатайымдың әсәһе, ейән-ейәнсәрҙәренә ярҙам итеп, улар менән бергә 16 йыл йәшәй. 1993 йылда 79 йәшендә ауылдың абруйлы уҡытыусыларының береһе, бай ғаиләлә тыуған Ҡаҙаҡкол ауылы ҡыҙы, Мәрхәбә Вәлит ҡыҙы Вәлитова яҡты тормош менән хушлаша.



# III бүлек. **Фәрит Билаловтың ижады**

Олатайым әҙәбиәт менән күптән ҡыҙыҡһынған эшен ауылға ҡайтҡас та йәнләндереп ебәрә. Ул саҡтарҙа яҙыусылар өсөн “Йәшмәләр” берекмәһе эшләп килгән була. Шул берекмә Фәрит Билаловтың шиғырҙарын, мәҡәләләрен “Ураҡ һәм сүкеш” гәзитенә баҫып сығара. Шунан олатайым дәртләнеп, яҙыша башлаған. Яҙыусылар кәңәшмәләрендә ҡатнашып, үҙенә фәһем алған.

Фәрит олатайҙың эш араһында ғына яҙған шиғырҙары күп. Ул уларҙы эштә иптәштәренә, сәхнәлә ауылдаштарына уҡып ишеттереп торған.



## Фәрит Билаловтың яҡты иҫтәлегенә

Был фани донъя берәүҙәргә оҙон ғүмер бүләк итә, икенселәрҙе аяп тормай - йәшләй генә арабыҙҙан алып китә...

Ҡәләмдәшебеҙ Фәрит Билаловтың вафат булыуына ла майҙа биш йыл үтеп китте. Әллә ниндәй оло вазифалар биләмәне ул - ябай эштәрҙә эшләне.

Бик күп йылдар республика-район гәзиттәренә яҙышып торҙо. Шиғырҙар яҙҙы, фәлсәфәүи (трактат тип атап та булалыр уны!) яҙмаларын нәшриәткә тапшырған ине. Тик үҙе үлгәс кенә донъя күрҙе уның китабы.

Тормошто яратҡан, ихлас холоҡло, хисле күңелле кеше ине ҡәләмдәшебеҙ. Ер улы ине...

Расих ЛОҠМАНОВ,
шағир.

### Яйығым

Һайлап ҡына Яйыҡ яйлап аға
Һандуғастар һайрар урында.
Дуғаланып ҡына иркен аға
Сәскә еҫе аңҡыр болондан.
Шифа һыуы уның мул булһа ла,
Әҙләп, тәмләп кенә йоторлоҡ.
Һәр тамсыһын уның әрәм итмәй
Дауа өсөн генә тоторлоҡ.
Аҫыл таштар йыуып сыҡҡан һыуҙан
Көс-ғәйрәттәр генә йыйырлыҡ.
Баллы тәлгәштәрҙе сайҡағанға
Сабый тәнен генә йыуырлыҡ.
Ҡомлоғонан таштар йыйып алдым
Мәрйен итеп тағып йөрөргә.
Оҙон юлдар ҡыуып сығып китһәм,
Уның төҫө итеп күрергә.

**5 декабарь 1981 йыл.**

x x x

Ҡаяларға баҫып юғарынан
Булды инде йәшен тотҡан саҡ.
Елдәрҙе лә уҙып, аттан осоп,
Булды инде һушһыҙ ятҡан саҡ.
Ғазапланыр инем, тәнде йоллап,
Хистәремә ирек бирмәһәм.
Ғазапланыр инем, ерҙә йәшәп,
Бар серҙәрен үҙем күрмәһәм.

Ни эшләйем инде ауан булғас,
Төплө аҡыл һаман ҡунмағас?
Ни эшләйем инде был тормоштоң
Матурлығын эсеп туймағас?
Мин тәүәккәл, бәлки, һин булғанға,
Ҡурсалағас әжәл-үлемдән.
Мин тәүәккәл: сөнки ҡат-ҡат үлеп
Терелергә кире өйрәнгән.

**28 май 1981 йыл.**

x x x

Экрандарҙа атыу, аҫыу, һуйыу...
Бөтәһе бар үлем хаҡында.
Яндыралар шашҡан утҡа ташлап,
Балаларҙы ҡыҙыу ялҡында.
«Беҙҙең фильм түгел. Торҙоҡ, балам.
Ҡарау түгел, күҙҙәр ояла.
Йәп-йәш ҡыҙҙы йыртҡыстарса көсләү
Хас түгел бит беҙҙең йолаға.
Йүнһеҙ нәмәләрҙе һин ҡарама,
Улар холҡо -аҙғын, алама.
Ҡылыҡтарын яҡшы белгең килһә,
Китап уҡы», - тием балама.
«Төшөн, улым, улар донъяһында
Ҡарттары ла иҫәр йәштәрҙән.
Олпатланып, ҙур урынға менгәс,
Һуғыш суҡмарына әйләнгән».

**Май, 1981 йыл.**

**Фәрит БИЛАЛОВ.**

Бергә эшләгән дуҫтарына таҡмаҡтар яҙған. Төртмә телле таҡмаҡтары аша ул ауылдың эшһөйәр һәм тырыш кешеләрен маҡтаған, ә ялҡауҙарҙы яратмаған. Уның 1981 йылда яҙған шиғырҙары байтаҡ. Мәҫәлән, уның миңә тәбиғәттең матурлығын, Яйыҡ йылғаһының шифа һыуын данлап, ҡоштар-хайуандар тормошон, йыл миҙгелдәрен, ағастарҙың шаулауын күҙәтеп маҡтап яҙған шиғырҙары оҡшай. Ул барыһын да күреп, хис-тойғоға бирелеп, матур һәм тыныс донъяның ҡәҙерен белеп, уларҙы яҙып өлгәрә алмай, тормоштан туя алмай йәшәгән.

Мәҫкәү ауылы ерҙәре
Электән йомарт икән.
Алтын ҡуллы уҡған ҡулдар
Булғанға шулай икән.
Тракторға һаҡлағанға
Мәңге һүнмәҫ мөхәббәт.
Атҡаҙанған исем алды
Хәйретдинов Мөхәмәт.

Көн-төн тимәй, ялды белмәй
Өлөштәрҙе өләшә.
Сажидәнең хеҙмәтенә

# Олатайымдың, беҙҙең бәләкәй дуҫтарыбыҙ – ҡоштар тураһында яҙған шиғырҙары оҡшай минә.

**Һабан турғай**

Баш осонда туҡтап, һабантурғай,
Ҡотлап һайрай яңы ояһын.
Иген сәскән саҡта орлоҡтарға
Көмөш моңдарыңды ҡояһың.

Йыры менән өҙөп әйтмәк була
Йыраҡ ерҙә ин-зар булыуын.
Ҡыш буйына һағыш көйө сүпләп
Күңеленең ташып тулыуын.

Йә талпынып күктән ҡыңғырауҙай
Көйҙәрендә ярып түгәһең.
Ҡомарланып ерҙе үбеү өсөн
Йә атылып түбән төшәһең.
Хис йомғағы булып күккә сөйөлөп,
Һөйөүеңдән янып төшмәсе.

Был шиғыры аша олатайым безгә, ошо ҡош һымаҡ, кеше урманды һаҡлап, таҙа тотоп йәшәргә тейеш, ти.

**Тумыртҡа**

Туҡылдата һуғып, ағастарҙың
Тыңлап ҡарай йөрәк тибешен.
Әйтерһең дә, урман санитары
Ихлас башҡарыусы үҙ эшен.



Был шиғыры кешене эш һөйөп йәшәргә өйрәтә. Эш бөткәс кенә уйнарға ярай, ти, олатайым.

**Ҡарлуғас**

Һауаларға бераү көй яҙған тим
Ноталарҙы күргәс тәүелә-
Тулҡындарҙы һыйпап, уйнап туйғас
Ҡарлуғастар сымда бәүелә.



Олатайым был шиғырында кеше тормошононң әсе яҙмышы тураһында яҙа, балаларҙы ташларға ярамай ти ул.

**Кәкүк**

Саҡырма ла, кәкүк, ҡошсоғонҙо,
Яҙмышығыҙ күптән аҙашҡан.
Һиҙҙермәйсә йәш түгәһең микән-
Моңдарың да әрнеү-һағыштан…



**Олатайым күсер ҡоштарҙы маҡтап яҙа, сөнки улар кире Тыуған илдәренә ҡайта, ташламай, ти. Кешеләрҙе ерен һатмай, Тыуған илен һөйөп йәшәргә өндәй.**

## Һаубуллашыу

Тыйнаҡ әсә кеүек ерем һыҡтай-
Тирә-яҡты ямғыр сылата.
Һағыштарға һабыштырып мине,
Йыраҡтарға ҡоштар юл тота.

Китер ҡош йөрәге ҡысҡырыуға,
Тәбиғәт тә бойоҡ, тын ҡала.
Күҙ йәштәре ҡатыш һаубуллашыу,
Күңелдәргә бөтмәҫ зар һала.



# Фәрит олатайымдың хайуандар тормошо тураһында ла шиғырҙары бар

## Мышы



Һуйыр тауыштарын ишеткәс тә
Мышы туктап калды тын алмай.
Колак япрактарын һоноп тыңлай-
Кейектәр ҙә, ахыры, моң аңлай.

Хайуандар ҙа тере йәндәр, улар ҙа матурлыкты күрә, ишетә белә. Һәр тауышка һак булып йәшәйҙәр. Мышылар - урман һаксылары, уларға тейергә ярамай.

**Йәҙрә**

**Борсаҡ тиклем йәҙрә ергә йыкты**
**Уйнаҡлаған болан балаһын.**
**Ҡулы булһа баҫыр ине мәхлүк**
**Ҡан саптырып торған яраһын.**



Ошо дүрт юллыҡ шиғырҙа ғына болан балаһына күпме йәлләү, ә насар кешегә үс - нәфрәт ҡала күңелдә. Хайуандарға теймәҫкә, уларға кәрәк саҡта ярҙам күрһәтергә өндәй был шиғыры Фәрит олатайҙың.

## "Ағастар" тигән шиғырында кеше ниндәй генә хәлгә төшһә лә, иманына тоғро калып, ауырлыкҡа бирешмәйенсә йәшәргә тейеш, ти.

**Ағастар**

Урман киҫкәнемдә күңелемде
Арбағайны оло ағастар.
Уйламаҫһың нисек – ауғанда ла
Ер һелкетеп тура ауғастар.
Тамырынан киҫелгәс тә улар
Бөгөлмәйҙәр, һынһа һыналар.
Янғын сыға калһа, шул ағастар
Аяҡ өҫтө тороп яналар.
Күпте күргән оло ағастарҙан
Мөмкин икән һабаҡ алырға:
Ниндәй генә хәлгә төшкәндә лә
Иманыңа тоғро калырға.





# Олатайым Яйыҡ йылғаһының шифалы һыуын да данлап яҙа

**Яйығым**

Һайлап ҡына Яйыҡ яйлап аға

Һандуғастар һайрар урында.
Дуғаланып ҡына иркен аға
Сәскә еҫе аңҡыр болонда.

Шифа һыуы уның мул булһа ла,
Әҙләп, тәмләп кенә йоторлоҡ.
Һәр тамсыһын уның әрәм итмәй
Дауа өсөн генә тоторлоҡ.

Аҫыл таштар
Көс- ғәйрәтт
Баллы тәлгәш
Сабый тәнен



Олатайым, Фәрит Шамил улы Билаловтың, 1991 йылда “Ышаныс” исемле публицистик мәҡәләләре донъя күрә. Ул был мәҡәләләрендә кеше, кешелек һәм мәңгелек тураһында уйланыуҙар яҙа. “Бесән” исемле ҡыҙыҡлы бәләкәй хикәйәһе “Шоңҡар” журналына баҫыла.


ПРОЛЕТАРИИ ВСЕХ СТРАН, СОЕДИНЯЙТЕСЬ!

ДИПЛОМ

"Яйык" газетаһы мөхәррирләте һәм Учалы йәшүсмәр ойошмаһы газетаның актив авторы

ФӘРИТ БИЛАЛОВТЫ

ошо диплом менән бүләкләй һәм уға артабанғы ижади юлында яңы уңыштар, сәләмәтлек, бәхет теләй!

"Яйык" газетаһы мөхәррире Р.Локманов

Учалы йәшүслар ойошмаһының яуаплы секретары М.Ямалетдинов

Учалы калаһы,
2 март, 199[illegible] йыл

# Әҙһәм Ғарипов һәм Хөснә Юлдыбаева премияһы лауреаты

1993 йылда, олатайым Фәрит Шамил улы Билалов, фәжиғәле үлә. Ул үлгәс, 1994 йылда "Серҙәр саҡыра" китабы баҫылып сыға. Олатайым Фәрит Билаловҡа районның әҙәбиәт өлкәһе буйынса Әҙһәм Ғарипов һәм Хөснә Юлдыбаева премияһы лауреаты исеме бирелә.



# Йомғаҡлау

Мин, Мәсҡәү ауылының берҙән-бер яҙыусыһы Фәрит Шамил улы Билаловтың ейәнсәре булараҡ, тикшеренеү эшемдә олатайым һәм уның ижады тураһында яҙырға алған йөкләмәне үтәнем. Олатайым “Ышаныс” исемле яҙмаһында кеше тураһында оҙаҡ уйланып яҙа. “Бөтә кеше гений була алмай” ти ул, ә шулай ҙа олатайымдың ижадын ныҡлап өйрәнеп, бәлки миндә лә шундай талант асылыр. Олатайым Фәрит Билалов ижадында тыуған яҡтың әҙәби мираҫы сағылған шиғырҙары бик күп, мин уның бер-нисәүһен генә уҡып ишеттерҙем. Уның нимә әйтергә теләгәнен мин яҡшы аңланым. Олатайым кеүек, үҙемде рухи яҡтан бай һәм ижади итеп үҫтерәсәкмен.



# Олатай, ҙур рәхмәт, һиңә!

**Рәхмәт һүҙе**

Фәрит Билалов

Рәхмәт әйтһәм изге кешеләргә,
Туҙандарҙан күңел йыуыла.
Бер тылсымлы һүҙҙең йылыһында
Ике кеше бергә йылына.

Рәхмәт һүҙе ҡай саҡ әйтелмәһә,
Көршәк кеүек, күңел ватыла.
Һүҙҙәр араһында ошо бер һүҙ
Осһоҙ табып, ҡиммәт һатыла.



# Кулланылған әҙәбиәт

1. Фәрит Билаловтың «Ышаныс» публицистик  мәҡәләләре
2. Яҙыусының «Автобиографияһы»
3. Фәрит Билаловтың «Серҙәр саҡыра» китабы
4. Фәрит Билаловтың шиғырҙар шәлкеме